Фёдоровка районының Фёдоровка 1-се муниципаль дөйөм урта белем биреү мәктәбе

# Зәйнәб Биишеваның «Дуҫ булайыҡ» әҫәренән өҙөк - сценарий

*Әнисә:* Әйҙә инде, Ҡыҙырас ағай! *(Әнисә сабырһыҙланып, Ҡыҙырастың еңенән тарта).* Әйҙә, әйҙә, тиҙ булайыҡ!

*Ҡыҙырас:* Киттек! Тик ни, һин, беҙ һөйләшкәндә, инмә, ҡара!

*Әнисә:* Инмәм, инмәм. Мин Биби апай янында ғына торормон.

*(Улар йүгереп сығып китәләр, болдорҙан ергә һикереп төшәләр ҙә Юлдаштарға инеп китәләр.*

*(Юлдаштарҙың өйө. Юлдаш диванда ята. Ишек шаҡыйҙар, кемдәрҙер килеп керә)*

*Ҡыҙырас:* Һаумыһығыҙ, Биби апай! Минең атайым һеҙҙә юҡмы?

*Әнисә:* Биби апай, Юлдаш ағайым өйҙәме? Ҡыҙырас ағайым уға килгәйне.

*Әсәй:* *(борсоулы тауыш менән).* Ҡыҙырас, һинең атайың Буранбай ағайың менән бергә мәктәпкә китте. Юлдаш үҙ бүлмәһендә. Бар уның янына ин.

*Юлдаш:* Бына нисек! Миңә өйгә, килергә булған! Был әшәке малай хәҙер миңә өйҙә лә тынғы бирмәҫкә итәме икән әле! Туҡмап сығарырға кәрәк уны! *(дивандан һикереп тора).*

*(Юлдаш Ҡыҙырасҡа бер һүҙ әйтергә ирек бирмәй, үҙ-үҙен онотоп, уға ташланды. Тәрткеләп, һуҡҡылап бүлмәнән ҡыуа башланы.)*

*Юлдаш:* Ниңә килдең, бар кит, сыҡ! Алдаҡсы! *(Ҡыҙырас сығып китергә теләмәне. Юлдаштың ныҡ йомарланған йоҙроҡтарын кире ҡағып, уны тынысландырырға тырышты)*

*Ҡыҙырас:* Ни, Юлдаш, туҡта! Туҡта тим!

*Юлдаш:* Ә, һуғышырға килдеңме ни әле һин?*(ҡысҡырып).* *(Улар, дыу килеп көрмәкләшеп, тәрткеләшеп, дөбөр-шатыр ултырғыстарҙы ауҙарып, иҙәндә аунап һуғышырға кереште. Әнисә йүгереп килеп инә).*

*Әнисә:* Эй, һеҙ ни эшләйһегеҙ! Бына оятһыҙҙар! Туҡтағыҙ! *(Әнисә уларҙың араһына инеп, икеһенә лә алмаш-тилмәш ҡарай)*

*Әнисә:* Бына алйоттар. Ярашыу шулай булалыр шул? Ҡыҙырас, һин ғәфү үтенергә, ярашырға тип килгәйнең дәбаһа?

*Ҡыҙырас:* Килһә ни...Үҙе һуғышҡас. *(түбән ҡарап)*

*Юлдаш:* Ярашырға?! Ғәфү үтенергә?

*Ҡыҙырас:* Эйе *(башын күтәреп)* Юлдаш, һин мине ғәфү ит. Асыуланма. Әлекке кеүек, дуҫ булайыҡ!*(ҡыйыуланып).* Ни, бит мин унда һине алдағым килеп алдаманым. Тик әллә ниңә һинең кеүек булғым килеп кенә алданым. Әгәр, ни минең ошондай малай икәнлегемде белһәң, дуҫ булмаҫһың, тип ҡурҡтым... унан һуң... ни... теге ҡурҡаҡлыҡ...Һине ташлап ҡайтып киттем.

Насар... Насар... Тик бынан кире ни, мин улай булмаясаҡмын. Һүҙ бирәм... Ни, мин һинең кеүек булырға теләйем. Ғәфү ит, Юлдаш!

*Юлдаш:* Ни өсөн ғәфү үтенергә?

*Ҡыҙырас:* Бөтәһе өсөн дә. Йә, теләһәң, һин мине ныҡ итеп бер туҡма ла, ғәфү ит. Унан, дуҫ булайыҡ, йә! Ғәфү итәһеңме?

*Юлдаш:* Эйе, турғай *(йылмайып)*. Һин дә мине ғәфү ит.

*Ҡыҙырас:* Булды!

*(Улар ирҙәрсә ҡаты итеп ҡул ҡыҫышалар)*

*Әнисә:* Биби апай, әсәй, ағайымдар ярашты!

*Ҡыҙырас:* Элеккесә дуҫ итәһеңме?

*Юлдаш:* Эйе.

*(Юлдаш дуҫтарса йылмайып)*

*Юлдаш:* Йә, һәр ваҡыт дуҫлыҡ, тырышлыҡ, ғәҙеллек, дөрөҫлөк яғында булыр өсөн ҡулыңды бирәһеңме?

*Ҡыҙырас (тантаналы тауыш менән):* Дуҫлыҡ, ғәҙеллек, дөрөҫлөк өсөн.

*(ҡулдарын Юлдаштың уҫтарына һалды)*

*Ошо ваҡыт бүлмәгә Ғимран, Талип, Зарифа, Гөлкәйҙәр йүгерешеп килеп инәләр.*

- Урра! Һуңланыҡ! Ярашҡандар! Ҡотлайбыҙ!

*Ҡыҙырас:* Беҙ, ғәжәп, шәп эште лә таптыҡ. Ул- дуҫлыҡ, ғәҙеллек, тырышлыҡ, дөрөҫлөк... Кеше ошоларҙан ситкә китмәһә, донъяла бөтә теләгәнен эшләй ала. Уның йәшәүе мәғәнәле, бәхетле була икән.

*Башҡалар:* Дөрөҫ! Йәшәһен дуҫлыҡ, тырышлыҡ, ғәҙеллек, дөрөҫлөк!

*(шаулашып алалар)*

*Дуҫлыҡ көйө.(баянда уйнала),йыр йырлайҙар. Н.Нәжми һүҙҙәре, Х.Әхмәтов музыкаһы. 114-се бит)*

1. Юлдарыма һиптең аҡ өмөттәр,
   Саҡырҙы [illegible] яҡты тараф мине
   Дуҫлыҡ, дуҫлыҡ ғүмер биргән бүләк
   Ғүмерҙәрҙән артып ҡалһа ине.
2. Осар ҡанат- йөрәк тибешендә
   Күңелемдә- тынмаҫ йырҙар иле.
   Дуҫлыҡ, дуҫлыҡ- ерем биргән бүләк,
   Ерҙән, йырҙан артып ҡалһа ине
   Алыҫ йондоҙ, яҡты йондоҙ кеүек,
   Һүнгәс тә, бер балҡып янһа ине.